Башҡортостан Республикаһы Учалы районы муниципаль районының муниципаль бюджет дөйөм белем биреү учреждениеһы Ә.Ғ. Хөснөтдинов исемндәге Учалы ауылы урта дөйөм белем биреү мәктәбе

| | | |
|---|---|---|
| Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының методик берекмә ултырышында ҡаралды.Протокол № 1 | Килешелде: Уҡытыу –тәрбиә эше буйынса | Раҫлайым: Мәктәп директоры: Кирәева Г.Ә. |
| “29”август 2023 йыл | директор урынбаҫары: Ғилмитдинов А.Р. | ______ |
| Етәксеһе: Нотфуллина Р.В. __________ | _____________ | Бойороҡ №1 29авг.2023йыл |

**10-11 кластар өсөн « ТУҒАН (БАШҠОРТ )ТЕЛ ҺӘМ ӘҘӘБИӘТ» УҠЫУ ПРЕДМЕТЫ БУЙЫНСА**

**2023-2024 уҡыу йылына эш программаһы**

Уҡытыу рус телендә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 5-11-се кластары өсөн “ Туған (башҡорт) тел һәм әҙәбиәт предметы буйынса белем биреү өлгө программалары ” китабына нигеҙләнеп төҙөлдө авт. В.И. Хажин, Ә.Х.Вилданов , Ф.Ә.Аҡҡужина.-Өфө : Китап,2017.

Төҙөнө: юғары категориялы башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Нотфуллина Р.В.

**Пояснительная записка**

Рабочая программа по родному (башкирскому) языку для 10-11 классов составлена в соответствии с положениями Федерального государственного образовательного стандарта по общему образованию. Эта программа составлена для башкирских детей по родному (башкирскому) языку, получающих образование в общеобразовательных организациях с русским языком обучения в соответствии с Конституцией РФ, Законом о языках народов России, Закон РБ о языках народов РБ. Она составлена для обеспечения детей знаниями, навыками выполнения упражнений, информацией на основе вышеперечисленных документов. Программа составлена на основе Примерной образовательной программы по учебному предмету «Родной язык и литература (башкирская)» для 5-11 классов общеобразовательных организаций с русским языком обучения. Авт.-составители: В.И.Хажин, Ф.А.Аккужина.- Уфа : Китап, 2017. Учебники: Хажин В.И., Вильданов А.Х., Аккужина Ф.А. Башкирский язык и литература. Учебное пособие для 10, 11 классов для изучения родного ( башкирского) языка и литературы в общеобразовательных организациях с русским языком обучения; Уфа-Китап.

ОСНОВНЫЕ ЦЕЛИ И ЗАДАЧИ ОБУЧЕНИЯ РОДНОМУ (БАШКИРСКОМУ) ЯЗЫКУ В ОБЩЕОБРАЗОВАТЕЛЬНЫХ ОРГАНИЗАЦИЯХ С РУССКИМ ЯЗЫКОМ ОБУЧЕНИЯ

• Воспитание личности, уважающей свой родной язык, владеющей им как русским языком, воспринимающей язык и литературу как значимую часть культуры, родной язык, как и русский язык, средством общения на одном уровне, язык как средство усвоения морально-этических норм общества, обычаев; а также морально устойчивой и патриотической личности.

• Уметь определять общие и различительные стороны родного языка и литературы, русского языка и литературы, усвоение базовых понятий лингвистики, структуру языка, систематизировать знания согласно его структуре, признать явления языка, факты, анализ, классификацию, давать им оценку, развивать словарный запас родного языка, правильно применять лексические, фразеологические единицы.

• Расширение коммуникативных возможностей обучающихся, развитие способностей, понимание коммуникативно-эстетических возможностей родного языка.

• Понимание тесной связи родной литературы с этнокультурой, историей, русской литературой и литературой других народов. Использование возможностей литературного произведения в развитии речи, обогащении словарного запаса, развитии общественного, личного развития обучающихся, их познавательной деятельности. • Развитие интеллектуальных и творческих способностей обучающихся, их культуры речи, возможностей сознательного и правильного применения родного языка, усовершенствование их коммуникативных способностей.

• Будучи единственным предметом, преподаваемом на родном языке в общеобразовательном учреждении с русским языком обучения, направлено на воспитание молодого поколения в духе гражданина России, в воспитании их патриотами, понимании ими их этнического происхождения, знании ими истории родного народа, языка, духовной культуры.

**I. ПЛАНИРУЕМЫЕ РЕЗУЛЬТАТЫ ОСВОЕНИЯ УЧЕБНОГО ПРЕДМЕТА, КУРСА**

Личностные результаты: -понимание того, что башкирский язык, башкирская литература являются самой основной национально-культурной ценностью башкирского народа;

-уважительно относиться к родному языку, понимать, что он ничем не хуже других языков, сохранить его как явление национальной культуры, стремиться к усовершенствованию речевой культуры; -создавать потребность в чтении литературы на башкирском языке; -

усвоить грамматические средства, создать достаточный запас слов для полной передачи своих чувств, пожеланий, идей в процессе общения;
**Метапредметные результаты:**
-усвоение всех видов речевой деятельности;
-правильное понимание сути услышанных и прочитанных информаций;
-прослушав разностилевые и разножанровые тексты, правильно понять их;
-уметь находить из разного рода источников (литература, СМИ, интернет) нужную информацию, уметь работать со справочными материалами; -уметь находить материал, соответствующий теме, ее систематизация, их анализ и выбор;
-сравнивать разные стили речи с позиции содержания, стилистических особенностей, употребления средств языка, уметь давать оценку;
-уметь рассказывать прочитанный или прослушанный текст на разных уровнях (полный, сокращенный, в форме плана);
-записав свою мысль, уметь красиво и свободно ее выражать;
-сохранив башкирский речевой этикет, уметь присоединяться к разговорам, беседам с разными людьми и в разных условиях;
-уметь давать оценку своей речи (письменному тексту и пересказу), исправлять, усовершенствовать, редактировать;
-уметь выступать перед аудиторией; -уметь сравнивать знания, полученные по башкирскому языку и литературе, со знаниями по русскому языку и литературе (межпредметный уровень), анализировать.
**Предметные результаты**: -получать понятия о том, что язык имеет основные функции, башкирский язык является национальным языком башкирского народа, язык неотрывен от культуры;
-получить знания о том, что родная литература имеет свое место в жизни башкирского народа, ее общность с литературами других народов, ее особенностей;
-усвоение научной информации о родном языке, понимание взаимосвязи их единиц и уровней между собой;
-усвоение лексики и фразеологии башкирского языка, орфоэпических, лексических, грамматических, стилистических норм;
-знание норм этикета речи
-знать единицы языка, грамматические категории и их анализ, правильно и к месту применять единицы языка;
-уметь делать анализы различного типа слов, словосочетаний, предложений (фонетический, словообразовательный, лексический, морфологический), уметь их сравнивать с русским языком;
-понимание в речевой практике возможностей грамматической синонимии, лексической синонимии, уметь их правильно применять;
-уметь сравнивать литературно-теоретические понятия с аналогичными из русской литературы, определять их похожие и отличительные черты, выявлять оригинальные стороны;
-уметь оценивать эстетические функции родного языка при анализе литературных текстов.

## II. СОДЕРЖАНИЕ УЧЕБНОГО ПРЕДМЕТА, КУРСА

Раздел 1. Башкирский язык 1 сентября - День знаний, беседа о профессии учителя, чтение стихов, слушание песен и просмотр фильма. Делиться впечатлениями о новом учебном годе, о первом звонке. Разговор о летнем отдыхе. В начале года в каждом классе организуется повторение пройденного. Фонетика. Специфические звуки башкирского языка. Сингармонизм.Строение слогов в башкирском языке.Лексикология.История башкирской письменности.Грамматическое значение слов.Особенности окончаний в башкирском языке.Фонетические варианты слов в башкирском языкеМорфология:имя существительное, глагол,прилагательное,местоимение,числительное. Понятие о языке и речи.Литературный язык.

Синтаксис.Способы соединения слов,виды словосочетаний:Виды простого предложения. Взаимная связь слов. Синтаксис простого предложения.Особенности строения сложных предложений.Языковые материалы изучаются в тесной взаимосвязи с литературным произведением. Раздел 2. Родной язык Обмен мнениями о месте башкирского языка среди тюркских языков, красоте языка, его особенностях. Обращение к произведениям искусства, прославляющим величие родного языка. Слушание песен, чтение легенд, произнесение пословицпоговорок и загадок. Усвоение идейно-тематического содержания литературных произведений о башкирском языке, уточнение значений непонятных слов, обогащение словарного знания, давать характеристику образу родного языка и другим образам. Уточнение выразительных средств, возвышающих образ родного языка, определение композиции, особенностей жанра. Прочитать стихи о родном языке поэтов - представителей других наций и остальные стихи, выполнить проектную работу. Раздел 3. Башкирская литература Усвоение идейно-тематического содержания произведений о Башкортостане. Дать полную характеристику образу Башкортостана. Пронаблюдать приемы описания и выразительные средства в произведениях о родной земле и Башкортостане, принадлежащих перу писателей разных поколений, сделать выводы. Ознакомить с интересным прошлым Башкортостана, организовать обмен мнениями о его сегодняшнем и будущем. При изучении литературных произведений о Башкортостане опереться на богатый фактический материал. Знакомство с картой Башкортостана, историческими книгами, кинофильмами, аудиозаписями, теле-радиопередачами, выполнение проектных работ. Раздел 4. Башкирское народное творчество. Научиться узнавать, определять виды, применять в устной и письменной речи, уметь применять в жизни малые жанры народного творчества – пословицы, загадки. Научить обучающихся узнавать типы сказок по их особенностям и при общении использовать элементы, присущие сказке. Научить уточнять и понимать художественные приемы сказки, мораль и композиционные части. Усвоение терминов, присущих народному творчеству, и применение их в учебном процессе, овладение навыками рассказа и монологической речи, умение ставить познавательную цель. Применение инфомационно-поискового метода. Научить умению узнавать виды народных рассказов, песен, такмаков, кубаиров, баитов, пониманию и уточнению их специфических особенностей, анализу с позиции идейнотематических, проблемных позиций, давать характеристику образам. Уточнение особенностей исполнения песен и такмаков (т.е. башкирских частушек). Кубаирский стиль, манера напевания мелодии, кубаиры в произведениях сэсэнов.Эпос «Урал батыр» -исторический памятник башкирского фольклора. Знакомство с творчестом сэсэнов:Карас сэсэн,Буранбай-Йэркэй сэсэн,Байык сэсэн,Мухаметша Бурангулов.История происхождения баитов, уточнение особенностей появления баитов и рассказа. Раздел 5. Древняя литература. Изучение древнетюркских писменных памятников, шежере (т.е. родословных), творчество сэсэнов (т.е. сказителей), образцов древней литературы:Коркот-ата(IX-XIвек) Литература Бульгарского периода: (I половина XII-XIII века) Кул-Гали «Кисса-и Йусуф».Понятие о жанре «кисса» Литература Кипчакского периода(II половина XIII века,I половина XVI века) Знакомство с творчеством Хусам Катиб «Жумжума Султан» (отрывок из дастана).Произведение «Последний из Сартаевса рода» Литература Российского периода ((II половина XVI века) Обогащение словарного запаса. Рассмотрение древа шежере, работа по изучению и составлению древа шежере своего рода. Прослушивание эйтешов (т.е. стихотворных состязаний) по аудиозаписям и обмен мнениями. Просмотр фильмов, исторических документов, спектаклей о Салавате Юлаеве и Мифтахетдине Акмулле, обмен мнениями. Дать информацию о поставленных им памятникам. Разговор об авторе памятника Салавату Юлаеву Сосланбеке Тавасиеве. От теории литературы к определению понятий: жанр кисса (т.е. повествование, легенда), архаизм, варваризм, неологизм. Шежере Рода Кара Табын.Прошение-письмо башкир Уфимского уезда.Письмо Батырши императрице Елизавете Петровне. Творчество Салавата Юлаева. Подробное знакомство с биографией Салавата Юлаева, историческая справка о его воспитании под руководством отца. Чтение исторической информации и документов, изучение и беседа о пребывании Юлая Азналина и Салавата Юлаева в крепости Рогервик. Усвоение содержаний произведений, уточнение их идей, изучение средств описания образа Салавата Юлаева и сравнение с другими произведениями. Просмотр историко-документальных и художественных фильмов о Юлае Азналине и Салавате Юлаеве, спектаклей, прослушивание песен и обмен мнениями. Выполнение творческих и

проектных работ на тему “Салават Юлаев в фольклоре, литературе, искусстве”, проведение мероприятий. Объяснить случаи отделения членов предложения друг от друга, выполнение упражнений, творческих работ, заданий. Стихи«Родная страна»,«Соловей», «Стрела»,«Джигиту». Раздел 6.Литературный процесс в XIX веке Х.Салихов.«Властелин времени».Г.Сукуруй.«Весна». «Кузыйкурпяч»(отрывок из повести) Литература эпохи просвещения Мифтахетдин Акмулла. Усвоение содержания произведений, раскрытие образов и идей. «Башкиры мои, надо учиться!», «Быть джигитом-быть просвещенным».Беседы о значении получения знаний и образования в разных областях науки. Мухаметсалим Умутбаев. Изучение жизни и творчества Уметбаева как поэта,переводчика,историкаэтнографиста,специалиста языка и литературы,общественного деятеля. Басня«Ремень и Лыко», статья«Великий поэт Александр Пушкин». Риза Фахретдинов.Краткое сведение о творчестве просветителяпедагога,прозаика,ученого-востоковеда,журналиста.Дать знание о разносторонней тематике его произведений на темы этики,педагогики,философии,истории,этнографии,эпиграфики,археологии,нумизматики,ге ографии,медицины,юриспруденции,искусства,языка,литературы,теологии.Произведение «Салима» о женщинах дореволюционного периода. Произведения об истории революционных событий,с точки зрения современности. Р.Байымов «Пестрый кречет» ,М.Ямалетдинов «Не смог найти пути спасения», Н.Асанбаев«Красный паша». Получение знаний о событиях революционных лет,о роли революции в жизни башкирского народа,о героях революции и Гражданской войны,об их горькой судьбе. Раздел 7. Литература начала XX века Произведения,отражающие1)жизнь народа до революции,2)произведения о защите Родины,родной земли.Изучение основной тематики ,идеи о величии большевистской революции.Творчество молодых революционно-настроенных писателей:М.Гафури,Ш.Бабича,А.Тагирова,Ф.Туйкина,Д.Юлтыя, С.Якшыгулова и др. М.Гафури «Бедняки», Б.Бахтигерей «Продажа земли»(драма),С.Якшигулов «Письмо башкирским братьям», Ш.Бабич «Весенняя песня»,Д.Юлтый «Сумка»,Ф.Туйкин «Отважные сыны Отечества» и др. Усвоение содержания произведений этих писателей.Ознакомление с культурнопросветительской жизнью в Оренбурге,Уфе,Троицке.Развитие медресе нового направления,печатного дела,выпуск газет и журналов «Вакыт», «Урал», «Шуро», «Тормош»,появление типографий,организация театральных объединений и трупп «Сайяр», «Ширкет» под руководством И.Кудашев-Ашкадарского,В.Муртазин-Иманского. Раздел 8. Литературный процесс в советское время. Современная башкирская литература Произведения,посвященные истории революции,строительству колхозов,темы истории башкирского народа в советский период. Д.Юлтый «Кровь», «Карагул»,Х. Давлетшина «Иргиз»,З.Биишева «К Свету»,И.Насыри «Шарафи агай»,Ф.Исангулов «Алтынбике»(отрывок из повести),М.Бурангулов «Карасакал»,К.Мерген «Крыло беркута»,Р.Назаров «Башкорт»,Г.Ибрагимов «Кинзя»,А.Хакимов «Звон думбры». Произведения,отражающие события в годы репрессии и культа личности Сталина. Г.Хисамов. «Актамыр»,А.Хакимов «Ураган». Тема:Человек и государственная система в судьбе людей Усвоение содержания,основной тематики произведений.Сравнительный анализ произведений на основе фильма «Первая Республика». Произведения,посвященные Великой Отечественной войне. Дать историческую справку о Великой Отечественной войне. Обмен мнениями о Георгиевской ленте, памятнике Неизвестному солдату. Освоение содержания произведений, посвященных военной теме и Дню Победы, анализ системы образов. Уточнение средств и приемов описания образа Солдата-воина. Работа над поэтикой произведения. Выполнение упражнений по выразительному чтению. Воспитание патриотических чувств. Просмотр историко-документальных, художественных фильмов, спектаклей, посвященных теме войны. Организовать беседу об участии «Бессмертного полка» на параде Победы. Организовать заочную экскурсию по местам боев. Прослушать песни, посвященные теме войны и Дню Победы, выполнить проектные работы. Изучение произведенийР.Нигмати, Д.Исламова,М.Карима,А.Хакимова.Р.Насирова.А.Атнабаева,Р.Гарипова,М.Каримова, Р.СафинаА.Аминева,Я.Хамматова. Произведения,посвященные мирному труду,теме деревни, экологии и охране природы -Проблемы самосохранения башкирской идентичности,самобытности.Жизнь и судьба башкирских деревень в эпоху цивилизации,перестроек. Г.Салям Утро Республики.Д.Исламов.Мой земляк-Ибрахим агай.Б.Рафиков.Старик Ахмар.А.Атнабаев.Последний урок.Р.Султангареев.Моей судьбы начало-человек и

природа; проблемы освоения и покорения природы; проблемы болезни и смерти от нарушения экологии, современная цивилизация, ее проблемы и вызовы.Выбор профессии.Как создать счастливую жизнь? Фантастика,сатира и юмор в современной башкирской литературе Б.Рафиков «Последний праздник Сухайли».В Исхаков «Ищем работу для брата!», «К нам невестка».Изображение проблемных вопросов через юмор и сатиру.Сохранение башкирских национальных обычаев и традиций. Башкирская литература в промежутке двух столетий.(поэзия,проза,драматургия) Данные темы определяются, исходя из современного состояния культуры, нацелены на формирование восприятия башкирской литературы как саморазвивающейся эстетической системы, на получение знаний об основных произведениях современной башкирской литературы, их общественной и культурно-исторической значимости. О свободе человека в условиях абсолютной несвободы; судьба башкир в прошлом, в настоящем и в проектах будущего. С.Абузар «Нищий»,Р.Камал «Узунтал», Н.Гаитбай «Ночь»(отрывок из трагедии).Н.Игезянова «Сания»,Ф.Акбулатова «Незаконченная книга»,А.Баймухаметов «Не оставляй меня,мама!»Х.Тапаков «Выходи мне навстречу»,Т.Гарипова «Буйракай» (отрывок из романа-эпопеи)Р.Туляк «Я в огне горю». Произведения философского характера Знакомство учащихся с произведениями философского характера в башкирской литературе.Размышления людей о смысле жизни,человеческом бытии были заложены уже в башкирском эпосе «Урал батыр»Философия и литература по-своему отражают и осваивают мир. Философия как мировоззрение оказывала и будет оказывает влияние на литературу, сама испытывая воздействие литературы. Философский текст- это вмешательство в диалог, стремящийся к литературно-поэтическому выражению и развертывающийся в бесконечности, поскольку искусство словесного построения и есть способ существования истины. На рубеже веков философия пыталась понять человека, его место в бытии и его отношения с миром. Происходит радикальное изменение лежащей в основе культуры модели человека. Философия ясно проявляет свою способность не просто описывать и объяснять то, что уже есть в человеке и культуре, но творить нового человека и новую культуру. Изучение произведений «Тормош»(парсалар) Г.Хусаинова.,Н.Наджми «Ворота», Б.Бикбая «Самаса»,Р.Гарипова «Поклонение» , «Жизнь»,Р.Назарова «В середине мировоздания», «Сердце», «Молния»,М.Карима «Долгое-долгое детство» и стихи

# Календарь – тематик план .

Фән – башҡорт теле һәм әҙәбиәте
Класс 10 – 11 –се кластар
Уҡытыусы : Нотфуллина Р.В.
Дәрестәр һаны : бөтәһе - 68 сәғәт , аҙнаһына - 2 сәғәт (Туған тел-1сәғ., туған әҙәбиәт-1сәғ.)
Планлаштырылған **контроль диктанттар** – 2
**Телмәр үҫтереү дәрестәре** : иншалар – 2
изложениелар – 2 Кластан тыш уҡыу дәрестәре - 2
Дәреслек : “ Башҡорт теле һәм әҙәбиәте “. ( рус мәктәптәренең 10-11-се класында уҡыусы башҡорт балалары өсөн дәреслек )
Авторҙары : Тикеев Д. С ., Ғафаров Б. Б. Өфө “ Китап “ 2007 й.
“ Башҡортостан Республикаһы рус мәктәптәренең 5 - 11 кластары өсөн башҡорт теленән һәм әҙәбиәтенән программаһына нигеҙләнеп төҙөлдө .
Авторҙары: Тикеев Д.С., Ғафаров Б.Б. , Хөснөтдинова Ф. Ә .

10-сы класс туған әҙәбиәт аҙнаға-1 сәғ

| № | Дәрес темалары | Сәғ һаны | Үткәреү ваҡыты | иҫкәрмә |
|---|---|---|---|---|
| 1 | Башҡорт һүҙ сәнғәте | 1 | | |
| 2 | «  Урал батыр» эпосы | 1 | | |
| 3 | « Йырауҙар » | 1 | | |
| 4 | « Боронғо дөйөм төрки әҙәбиәте» | 1 | | |
| 5 | Ҡол Ғәли  « Йософ ҡиссаһы » | 1 | | |
| 6 | Хисам Ҡәтиб   « Жөмжөмә солтан» | 1 | | |
| 7 | «Батыршаның батшаға яҙған хаты » | 1 | | |
| 8 | Салауат Юлаев    « Яу », « Уҡ », « Егеткә» шиғырҙары | 1 | | |
| 9 | Һибатулла Салихов  « Замана хакимы», Ғәли Соҡорой « Яҙ миҙгеле » | 1 | | |
| 10 | МифтахетдинАҡмулла«Башҡортттарым,уҡыу кәрәк! » | 1 | | |
| 11 | Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев   «Ҡайыш илә йүкә » | 1 | | |
| 12 | Мәжит Ғафури   «Ярлылар йәки өйҙәш ҡатын » | 1 | | |
| 13 | Мәжит Ғафури   «Шәриғәт  ҡорбандары » | 1 | | |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| | | | | |
| 14 | Һәҙиә Дәүләтшина «Айбикә »( повестан өҙөк) | 1 | | |
| 15 | Ғәли Ибраһимов «Кинйә » (романдан өҙөк) | 1 | | |
| 16 | Мостай Кәрим «Ҡара һыуҙар » поэмаһы | 1 | | |
| 17 | Рафаэль Сафин « Ҡыр ҡаҙҙары» | 1 | | |
| 18 | Рәшит Солтангәрәев « Яҙмыш ебенең башы » | 1 | | |
| 19 | Назар Нәжми « Ҡапҡалар» поэмаһы | 1 | | |
| 20 | Рәми Ғарипов « Табыныу » поэмаһы | 1 | | |
| 21 | Рәшит нНазаров ижады « Йәшен » | 1 | | |
| 22 | Баязит Бикбай «Булмам самаса » | 1 | | |
| 23 | Мостай Кәрим «Оҙон –оҙаҡ бала саҡ » | 1 | | |
| 24 | Мостай Кәрим « Йәшәйһе бар, һаҡла үҙеңде , тиһең» | | | |
| 25 | | 1 | | |
| 26 | Булат Рафиҡов «Әхмәр ҡарт » | 1 | | |
| 27 | Әнғәм Атнабаев «Һуңғы дәрес » | 1 | | |
| 28 | Марат Кәримов «Миҙалдар » | 1 | | |
| 29 | Әнғәм Атнабаев «Әсә хөкөмө » | 1 | | |
| 30 | Рәүеф Насиров « Үлһәм , Матросов тип эҙләрһең » | 1 | | |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| 31 | Денис Исламов «Ҡамалыу » | 1 | | |
| 32 | Әхиәр Хәкимов «Күпер » | 1 | | |
| 33 | Үтелгәндәрҙе ҡабатлау дәресе | 1 | | |
| 34 | Йомғаҡлау | 1 | | |

10-сы класс туған башҡорт теле аҙнаға-1 сәғ

| № | Дәрес темалары | Сәғ һаны | Үткәреү ваҡыты | иҫкәрмә |
|---|---|---|---|---|
| 1 | Башҡорт теле   инеш | 1 | 2.09 | |
| 2 | Башҡорт теленең фонетикаһы | 1 | 9.09 | |
| 3 | Сингармонизм | 1 | 16.09 | |
| 4 | Башҡорт һүҙәрендә ижек төҙөлөшө | 1 | 23.09 | |
| 5 | Башҡорт теленең лексикологияһы | 1 | 30.09 | |
| 6 | Башҡорт яҙмаһы тураһында | 1 | 7.10 | |
| 7 | Һүҙәрҙең грамматик мәғәнәһе | 1 | 14.10 | |
| 8 | Башҡорт теленең ялғауҙары үҙенсәлеге | 1 | 21.10 | |
| 9 | Аңлатмалы диктант | 1 | 28.10 | |
| 10 | Хаталар өҫтөндә эш дәресе | 1 | 11.11 | |
| 11 | Башҡорт телендә һүҙәрҙең фонетик варианттары | 1 | 18.11 | |
| 12 | Исем | 1 | 25.11 | |
| 13 | Исемдең грамматик категориялары | 1 | 2.12 | |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| 14 | Исемдәрҙең килеш менән үҙгәреше | 1 | 9.12 | |
| 15 | Сифат | 1 | 16.12 | |
| 16 | Сифаттың грамматик категориялары | 1 | 23.12 | |
| 17 | Һан | 1 | 13.01 | |
| 18 | Һан төркөмсәләре | 1 | 20.01 | |
| 19 | Һандарҙың дөрөҫ яҙылышы | 1 | 27.01 | |
| 20 | Ҡылым | 1 | 3.02 | |
| 21 | Ҡылымдың замандары | 1 | 10.02 | |
| 22 | Ҡылым һөйкәлештәре | 1 | 17.02 | |
| 23 | Контроль эш | 1 | 24.02 | |
| 24 | Башҡорт телендә юҡлыҡты белдереү | 1 | 3.03 | |
| 25 | Алмаш тураһында | 1 | 10.03 | |
| 26 | Алмаш төркөмсәләре | 1 | 17.03 | |
| 27 | Диктант яҙыу | 1 | 24.03 | |
| 28 | Теркәүестәр | 1 | 7.04 | |
| 29 | Бәйләүестәр | 1 | 14.04 | |
| 30 | Киҫәксәләр | 1 | 21.04 | |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| 31 | Килештәр темаһын ҡабатлау | 1 | 28.04 | |
| 32 | Ымлыҡтар тураһында мәғлүмәт биреү | 1 | 5.05 | |
| 33 | Йыллыҡ диктант яҙыу | 1 | 12.05 | |

**11а класс туған (башҡорт)тел ( аҙнаһына 1 сәғ,йылына-34сәғ)**

| № | Тема | Сәғ. | Үткәреү ваҡыты | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | | | Иҫкәрмә |
| 1 | Башҡорт теле.Тел һәм телмәр. | 1 | 5.09 | | |
| 2 | **Инеү диктанты.Өс быуатлыҡ тарих.** | 1 | 12.09 | | |
| 3 | Әҙәби тел тураһында. Хаталар өҫтөндә эш. | 1 | 19.09 | | |
| 4 | Морфологияны ҡабатлау. | 1 | 26.09 | | |
| 5 | Һүҙбәйләнеш | 1 | 3.10 | | |
| 6 | Башҡорт телендә һүҙҙәрҙең бер береһенә бәйләнеү юлдары | 1 | 10.10 | | |
| 7 | Һөйләм | 1 | 17.10 | | |
| 8 | **Контроль диктант.Баймаҡ ҡалаһының башы** | 1 | 24.10 | | |
| 9 | Һөйләм киҫәктәрен билдәләү алымы.Хаталар өҫтөндә эш | 1 | 31.10 | | |
| 10 | Һөйләм киҫәктәренең һорауҙары | 1 | 7.11 | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| 11 | Ике составлы һөйләмдәр | 1 | 14.11 | | |
| 12 | **Изложение.Салауат күпере.** | 1 | 21.11 | | |
| 13 | Тулы һәм кәм һөйләмдәр.Хаталар өҫтөндә эш | 1 | 28.11 | | |
| 14 | Бер составлы һөйләмдәр Хаталар өҫтөндә эш | 1 | 5.12 | | |
| 15 | **Контроль диктант. Зәһир Исмағилев.** | 1 | 19.12 | | |
| 16 | Атама һөйләмдәр.Хаталар өҫтөндә эш. | 1 | 26.12 | | |
| 17 | Билдәле эйәле һөйләмдәр | 1 | 16.01 | | |
| 18 | Билдәһеҙ эйәле һөйләмдәр | 1 | 23.01 | | |
| 19 | Эйәһеҙ һөйләмдәр | 1 | 30.01 | | |
| 20 | Ҡушма һөйләм төрҙәре | 1 | 6.02 | | |
| 21 | Эйәртеүле ҡушма һөйләм | 1 | 13.02 | | |
| 22 | Эйәртеүле ҡушма һөйләм төрҙәре | 1 | 20.02 | | |
| 23 | **ТҮ.Инша.Әсәм теле –сәсән теле** | 1 | 27.02 | | |
| 24 | Теҙмә ҡушма һөйләм төрҙәре | 1 | 6.03 | | |
| 25 | Теркәүесле теҙмә ҡушма һөйләм | 1 | 13.03 | | |
| 26 | **Контроль диктант. Бейеү сәнғәтенең йөндоҙо** | 1 | 20.03 | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| 27 | Теркәүесheҙ теҙмә ҡушма hөйләм.Хаталар өҫтөндә эш. | 1 | 27.03 | | |
| 28 | Һөйләм киҫәге менән бәйләнеше булмаған hүҙҙәр.Өндәш hүҙҙәр | 1 | 3.04 | | |
| 29 | Инеш hүҙҙәр hәм hүҙбәйләнештәр | 1 | 10.04 | | |
| 30 | Тура hәм ситләтелгән телмәр. Тура hәм ситләтелгән телмәрҙә тыныш билдәләренең ҡуйылышы. | 1 | 17.04 | | |
| 31 | Текст төҙөлөшө.Нимә ул текст? Текст эсендәге hөйләмдәрҙең үҙ-ара бәйләнеү юлдары hәм саралары | 1 | 24.04 | | |
| 32 | **Йыллыҡ контроль диктант.Ҡырсынташ.** | 1 | 8.05 | | |
| 33 | Хаталар өҫтөндә эш.Үтелгәндәрҙе ҡабатлау. Йомғаҡлау. | 1 | 15.05 | | |
| 34 | Йомғаҡлау дәресе | 1 | 22.05 | | |

**11а класс туған тел һәм әҙәбиәт(аҙнаһына 1сәғ,йылына-34 сәғ.)**

| № | Темалар | Сәғ. һаны | План | Фактик | Иҫкәрмә |
|---|---|---|---|---|---|
| **Хәҙерге башҡорт әҙәбиәте-1** | | | | | |
| 1 | Хәҙерге башҡорт әҙәбиәте | 1 | 2.09 | | |
| **Тарихи –революцион ваҡиғаларҙы яңыса яҡтыртҡан әҫәрҙәр- 6 сәғәт** | | | | | |
| 2 | Р. Баимов.Сыбар шоңҡар. | 1 | 9.09. | | |
| 3 | Р.Баимов .Сыбар шоңҡар. | 1 | 16.09 | | |
| 4 | М.Ямалетдинов.Ҡотолоу юлҡайҙарын тапманым.**Кадет компоненты.** | 1 | 23.09 | | |
| 5 | М.Ямалетдинов.Ҡотолоу юлҡайҙарын тапманым | 1 | 30.09 | | |
| 6 | Н.Асанбаев.Ҡыҙыл паша. | 1 | 7.10. | | |
| 7 | Драма тураһында төшөнсә | 1 | 14.10. | | |
| **Шәхес культына,реппрессияларға бәйле ваҡиғаларҙы сағылдырған әҫәрҙәр-5сәғәт** | | | | | |
| 8 | Ғ.Хисамов.Аҡтамыр(романдан өҙөк) | 1 | 21.10 | | |
| 9 | Ә.Хәким.Өйөрмә | 1 | 28.10 | | |
| 10 | Ә.Хәким Өйөрмә | 1 | 11.11. | | |
| 11 | Ә.Хәким Өйөрмә | 1 | 18.11 | | |
| 12 | Изложение.Әсә йыры | 1 | 25.11 | | |
| **Хәҙерге башҡорт әҙәбиәтендә Бөйөк Ватан һуғышы темаһы-4 сәғәт** | | | | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| 13 | Әмир Әминев.Танкист | 1 | 2.12. | | |
| 14 | Я.Хамматов.Тыуған көн. | 1 | 9.12. | | |
| 15 | Я.Хамматов.Тыуған көн | 1 | 16.12 | | |
| 16 | ТҮ.Инша.Мәңгелек хәтер | 1 | 23.12 | | |
| **Хәҙерге башҡорт әҙәбитендә тарихи тема-3 сәғәт** | | | | | |
| 17 | Ғ.Ибраһимов.Кинйә. | 1 | 13.01. | | |
| 18 | Ә.Хәкимов.Думбыра сыңы | 1 | 20.01 | | |
| 19 | Ә.Хәкимов.Думбыра сыңы | 1 | 27.01 | | |
| **Хәҙерге башҡорт әҙәбиәтендә экологик проблемаға арналған әҫәрҙәр -5 сәғәт** | | | | | |
| 20 | Н.Мусин. Ҡарамыш ҡарт.**Информацион хәүефһеҙлек** | 1 | 3.02. | | |
| 21 | Н.Мусин. Ҡарамыш ҡарт | 1 | 10.02. | | |
| 22 | Д.Бүләков.Килмешәк. | 1 | 17.02 | | |
| 23 | Д.Бүләков.Килмешәк. | 1 | 24.02 | | |
| 24 | ТҮ.Инша.Тыуған яғым тәбиғәте. | 1 | 3.03. | | |
| **Хәҙерге башҡорт әҙәбиәтендә ауыл темаһы-2 сәғәт** | | | | | |
| 25 | Р.Солтангәрәев.Тыуған йорт. | 1 | 10.03 | | |
| 26 | Р.Камал.Таня-Таңһылыу | 1 | 17.03 | | |
| **Хәҙерге башҡорт әҙәбиәтендә фантастик әҫәрҙәр-1 сәғәт** | | | | | |
| 27 | Һуҡайлының һуңғы байрамы | 1 | 24.03 | | |
| **Хәҙерге башҡорт әҙәбиәтендә сатира һәм юмор-1 сәғәт** | | | | | |
| 28 | В.Исхаҡов.Ҡустыға эш эҙләйбеҙ.Килен төшөргәндә. | 1 | 7.04. | | |
| **Ике быуат араһында башҡорт әҙәбиәте(поэзия,проза,драматургия)-6сәғәт** | | | | | |
| 29 | Р.Камал.Оҙонтал. | 1 | 14.04 | | |
| 30 | А.Баймөхәмәтов.Ҡалдырма ,әсәй! | 1 | 21.04 | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| 31 | Әҙәбиәттән үтелгәндәр буйынса контроль эш. | 1 | 28.04 | | |
| 32 | Р.Түләк.Яныу. | 1 | 5.05. | | |
| 33 | Йомғаҡлау. | 1 | 12.05. | | |
| 34 | Үтелгәндәрҙе йомғаҡлау. | 1 | 19.05. | | |

Ҡушымта 1

Контрольно- измерительные материалы. 10 класс

Диктант текстары I сирек

**Ҡул йылыһы.**

Быға тиклем малайҙар ҡушаматымды әйтеп үсекләүҙән тыш, мине ерле юҡҡа ҡыйырһытманы. Дәүерәктәр ҡанат аҫтына ала килде. Хәҙер нимә булды һуң? Ниңә минең өстән берәү ҙә Хәмитйәнде тартып төшөрмәй? Баяғы күҙле ҡаҙыҡтар, бер-береһен ҡыуып, түңәрәк тирәләй әйләнә башланы. Әйләнгән ерҙең үҙәге һымаҡ, уртала минең Оло инәйем баҫып тора. Донъя яғынан үҙ урынына ултыра. Инде мин үҙем, аҡрын ғына бәүелеп, ҡайҙалыр әллә осоп, әллә йөҙөп барам. Яңағымда йомшаҡ йылы нәмә һиҙәм. Был Оло инәйемдең ус төбө, мин уны шунда уҡ таныным. ...Ошо ҡулдың йылыһы һәм ҡөҙрәте бынан ары ла мине бөтә ғүмерем буйы һаҡлаясаҡ һәм яҡлаясаҡ. Минең тынғыһыҙ һәм дыуамал башым өсөн ул иң ышаныслы һәм мәрхәмәтле төйәк буласаҡ, һуңғы һулышымды алған мәлемдә мин, моғайын, бик аҙ нәмәләрҙе хәтергә төшөрөргә, бик аҙ заттар менән хушлашырға өлгөрөрмөн. Ләкин шуныһын асыҡ беләм: әллә ҡасан донъя ҡуйған Оло инәйемдең йомшаҡ ҡулын иҫкә алырға, уның йылыһы менән хушлашырға ваҡыт табырмын. Башҡаса мөмкин түгел. (Толомбаев Х.А., Атнағолова С.В. Диктанттар йыйынтығы. Башҡорт теленән 5- 9 синыф уҡытыусылары өсөн ҡулланма. 222-се б.)

**Аҡ ҡайын.**

Ауылыбыҙҙың осонда түңәрәк кенә бер аҡлан бар. Яҙ етеү менән, аҡлан өҫтөн хәтфәләй йәшел үлән ҡаплай, тәүге сәскәләр күҙҙәрен аса. Элегерәк уртала аҡ ҡайын үҫә ине. Ер йәшәргәс, ул аҡланды йәмләп, нәфис япраҡтарын ярып, селтәр шәлен иңенә һалып, тағы ла матурыраҡ

булып, ғорурланып ултыра торғайны. Быйыл яҙын аҡ ҡайын өндәшмәй генә, моңһоуланып тора бирҙе, сөнки уҙған йәйҙә тыйнаҡһыҙ малайҙар уның ботаҡтарын һындырҙылар, бысаҡ менән уңалмаҫ яралар яһап, тәмле һыуын ағыҙып эстеләр. Ул ғына етмәгән, шашҡан малайҙар ҡайынға ут төртөп киткәндәр. Ерҙә тағы яҙ шаулай. Елбер- елбер килеп, береһенән-береһе матур күбәләктәр оса, турғайҙар, яңы тыуған көнгә ҡыуанышып, матур йырҙарын һуҙа. Тик ҡайын ғына һаман терелмәй. Тирә- яғындағы үләндәр ҙә баш ҡалҡыта алманы. ...Тәбиғәттең бер генә биҙәге юғалһа ла, донъябыҙҙың бер мөйөшө кителгән һымаҡ тойола. Эй, кешеләр, һаҡлайыҡсы тыуған еребеҙҙе, тәбиғәтебеҙҙе, илатмайыҡ аҡ ҡайынды! (Толомбаев Х.А., Атнағолова С.В. Диктанттар йыйынтығы. Башҡорт теленән 5- 9 синыф уҡытыусылары өсөн ҡулланма. 234-се б.)

11-се класс

**Ер биҙәге**

Түбәһенә уртаса ҙурлыҡтағы маяҡ ҡуйылған ҡалҡыулыҡта Носрат ҡарт атын туҡтатты ла ергә һикереп төштө. - Аттар ашап алһын, ҡыҙым, - тине ул һәм Рәщилә атының да теҙгенен бәйләп ҡуйҙы. Улар маяҡ янына барып баҫтылар ҙа әйләнә- тирәгә күҙ ташланылар. Уларҙың күҙ алдында иге-сиге күренмәгән урман диңгеҙе йәйелде. Бик бейек тау икән шул был. Тирә- яҡ ус төбөндәгеләй күренә. Башҡа тауҙар унан тәпәшәгерәкикән. Бөтәһен дә ҡуйы, меңйәшәр ҡарт урман ҡаплаған. Һирәк-мирәк ҙур булмаған болонлоҡтар күҙгә ташлана. Быларына Рәзилә артыҡ иғтибар итмәй. Көҙгө урман бөтә һоҡландырғыс матурлығы менән уны үҙенә тартты, сөнки Рәзиләнең йөҙәрләгән төрлө ағаслы, шундай икһеҙ- сикһеҙ урманға йылдың был мәлендә ошондай бейек тау башынан быға тиклем һис бер ваҡытта ла ҡарап торғаны юҡ ине. Ниндәй һоҡландырғыс икән был урман! Ҡарағайҙар, йәйге ҡарағусҡыллығын юғалтып,асыҡ йәшел төҫкә ингәндәр. Ҡайын япраҡтары һары, уҫаҡ һәм сағандыҡы йә һоро, йә алһыуға буялғандар. Мәғрур имәндәр йәшел шәлдәрен һаман һалмағандар. Йүкәлектәр ҡара көрән төҫтә күренәләр, уларҙың япраҡтары иртәрәк ҡойола шул. (Толомбаев Х.А., Атнағолова С.В. Диктанттар йыйынтығы. Башҡорт теленән 5- 9 синыф уҡытыусылары өсөн ҡулланма. 238-се б.)

**IV сирек**

**Оҙон юл**

Тирә- яҡта ҡалын урман. Октябрь башында уҡ ғәжәп бер төҫкә инә лә оҫта сигелгән келәмгә оҡшап ҡала икән ул. Әлморон менән миләш ҡыуаҡтары, һырға таҡҡан ҡыҙҙыр кеүек, ҡыҙыл төймәләргә күмелеп ултыра. Яланғас ағастар һыҙатын, төрлө хәүефтәрҙән һаҡлағандай, көслө имәндәр уратып алған. Уларҙың ҡараһыу-ҡыҙылһыу япраҡтары аҡрын ғына ҡыштырлаша. Артабан инде йәй ҙә йәшел, ҡыш та йәшел шыршылар, күкшел ҡарағайҙар теҙелешеп китә. Был һылыуҙар, дәрәжә һаҡлағандай, тын ғына быҫып торалар. Урман да тау, тау ҙа урман. Юлдың осо ла, ҡырыйы ла күренмәй. Тау һәм урман диңгеҙендә яңғыҙ елкән шикелле йөҙәһең дә йөҙәһең. Япа- яңғыҙың сәғәттәр буйы бараһың. Ниһайәт, аҡһыл төтөн күҙгә салына. Тимәк, кешеләр йәшәй был тирәлә. Юл оҙон. Юл кеүек үк оҙон уйҙар. Хөрмәт саптарҙың лерт-лерт юртыуына һикерәһикерә алға тәгәрәүсе кырандасҡа ҡырын төшөбөрәк ултырып алған да, береһен ишеп, икенсеһен һүтеп, уйҙарының осона сыға алмай килә. (Толомбаев Х.А., Атнағолова С.В. Диктанттар йыйынтығы. Башҡорт теленән 5- 9 синыф уҡытыусылары өсөн ҡулланма. 233-сө б.)

**Изложение текстары**

**I сирек Ҡәнифә юлы**

Үҙебеҙҙең Урал тауҙарында Ҡәнифә юлы тигән бик оҙон бер юл бар. Ул Һаҡмарҙың үрге яғында башлана ла Урал һырттарының береһе буйлап төшлөккә табан китә. Гел тау баштарынан, иң ҡалҡыу урындар аша алыҫтарға бара-бара ла ахыр сиктә, юл Ырымбур далаларына төшөп юғала икән... Кем булған ул Ҡәнифә? Юлға үҙ исемен ҡалдырып, халҡыбыҙҙың мәңгелек хәтеренә ул нисек инеп ҡалған, легендаларҙа тамырланырлыҡ ниндәй дан ҡаҙалған? ...Башҡорттарҙың йәмле бер йәйләүенә йәшеренеп кенә ҡаҙаҡтар яҡынлаша ла Ҡәнифә исемле бер бик һылыу ҡыҙҙы урлап китә улар. Йәйләү эргәһендә йөрөгән йылҡы өйөрөн дә ҡыуып алып китә улар. Алыҫтағы далаларына алып ҡайтып, ҡаҙаҡтар Ҡәнифәне үҙҙәренең бер батырына көсләп кейәүгә бирә. Әммә Ҡәнифә ерһенмәй, тыуған илен һағына, нисек кенә булһа ла ҡасып ҡайтып китеү яғын көнө- төнө уйлап йөрөй. Тик ҡайһы яҡҡа ҡасырға, нисек юл табырға? Ҡаҙаҡ далаларына килеп сыҡҡан бер башҡорт ҡарты, Ҡәнифәнең аһ-зарын ишетеп, күҙ-йәшен күреп, уға сер итеп кенә юл өйрәтә. Бер ҡыш үтеп, яҙғы ташҡындар ҡайта төшкәс, Ҡәнифә ҡасыр юлына сыға. Һыбаймы, йәйәүләпме, үҙҙәренең йәйләүҙәренән килгән йылҡыларҙы ла үҙе менән ҡыуып алып китә. Төньяҡҡа табан ҡаса-боҫа күп көндәр, күп төндәр барырға тура килә уға. Тыуған яҡтарына, ҡалҡыу ерҙәргә яҡынлаша башлағас, береһе артынан береһе теҙелеп киткән тауҙар һыртына менеп ала ул. Тәпәш ерҙәрҙә әле бысраҡ, батҡаҡлы булғанға күрә, тау юлы бик уңайлы булып сыға, унда ҡоро ла,

йәшел ңлән дә күпереп шыта башлаған, йәрененәм тиһәң – урмандар ҙа бар, ашарыңа – йыуа ңсә, шишмәләр ҙә етәрлек...Тауҙар һыртынан туп-тураға, юлһыҙ ерҙән юл ярып, Ҡәнифә тағын оҙаҡ ҡына бара һәм, малдарын ҡыуа-ҡыуа, ахыр сиктә, үҙ ырыуы йәшәгән төбәккә килеп сыға. Сәсәндәр телендә был ябай ғына хикәйәт мең төрлө күренештәр, ваҡиғалар менән биҙәкләнә. Ҡәнифәне йә ҡаҙаҡтар баҫтыра, йә ул, ат өҫтөндә сабып килеп, киң даръяға ташлана, йә Ҡәнифә, тыуған еренән тәңге сәскәләрен кңреп, ҡыуанысынан илап та, йырлап та ебәрә. Ҡәнифә бөтә ҡаршылыҡтарҙы, ҡыйынлыҡтарҙы еңеп сыға, үҙ иленең шишмәләре уға көс бирә, ҡара төндәрҙә Тимерғаҙыҡ йондоҙо уға юл күрһәтә. Был юл буйлап елдереп үткән һайын шундай уй килә: Ҡәнифәнең юлы һаман таҡыр ҙа бит, тик уның исемен, уның тураһында хәтирәләрҙе, иҫтәлектәрҙе ниндәй яҙмыш көтә? Халыҡ әгәр үҙенең тарихын һанға һуҡмай башлаһа, ата-бабаларының изге васыяттарын онотһа, быуаттар буйы тупланып килгән уй-фекерҙәренең, күңел хазиналарының сүп-сарға әйләнеүенә юл ҡуйһа, тәбиғәткә үрелеп үҫкән моңдарынан, йырҙарынан баш тартһа, туған телен ташлаһа – ул саҡта Ҡәнифәнең дә бер кемгә лә кәрәге булмай сыға. Халыҡ хәтерендә эҙең өҙөлмәһен, мәңге йәшә, сая Ҡәнифә! (Ғималова М.Ғ., Рәхимова С.М. Изложениелар өсөн текстар йыйынтығы: V-IX класс уҡытыусылары өсөн ҡулланма, үҙгәртелгән 3–сө баҫмаһы.- Өфө: Китап, 2009, 170-се

**II сирек**

**Бәләкәй Ҡотош**

Завод мөрйәләре таңғы гудоктарын ҡысҡыртты. Атайым шул саҡ, һалмаҡ ҡына кеәенә лә, ауыҙына төрөпкәҙен ҡабып эшкә сығып китте. Ошо ваҡытта әсәйем бәләкәй шәмде яндыра ла иҫке моҫҡоларҙы ямай башлай. Мин был ваҡытта йоҡлап ҡала торғайным, шуның өсөн ошолар ғына хәтеремдә урынлашып ҡалған. Иртән торғас, әсәйем мнең тамағымды туйҙыра ла Ғәләү күршеләргә кертеп китә. Мин көнө буйы тышта уйнайым йәки подвалдың ишегендәге йоҙаҡҡа ҡарап ултырам. Әсәйемдең ҡайтыуын мин ныҡ көтә инем, сөнки ул миңә тәмле икмәк һынығы йәки бәлеш алып ҡайта. Атайым ҡараңғы төшкәс кенә ҡайта, шуның өсөн мин уның ҡасан һәм нисек ҡайтғанын да белмәйем. Мин бер көн йоҡонан торғанда, атайым, һикелә аяҡтарын һәлендереп, иҙеүҙәрен ысҡындырып, төрөпкәһен тартып ултыра ине. Ғәҙәттә, ул байрам көндәрендә лә өйҙә булмай торғайны. Уның бөгөн өйҙә булыуы мәрәкә тойолдо. Мин, шым ғына барып, уның эргәһенә ултырҙым да төрөпкәһенән төрөлөп- төрөлөп сыҡҡан төтөндәргә ҡараным, унан һуң йөҙөнә күҙ төшөрҙөм. Уның эскәрәк батып торған ҡыҫыҡ ҡара ҡүҙҙәрендә, йыйырсыҡланып торған йөҙөндә әллә ниндәй үҙгәреш бпр ине. Биттәрендә, күҙ төптәрендә йыйырсыҡтарҙа, бүтән көндәргә ҡарағанда, күберәк күренә ине. Мин уның йөҙөнә оҙаҡ ҡарай алманым. Йәһәт кенә күҙемде алдым да әсәйем янына бармаҡсы булдым. Ул мейес эргәһендә әллә нәмәкәй ҡыҙҙырып, бешереп маташа ине. «Старшилар менән үҙең боҙолошҡанһыңдыр әле!», - тине әсәйем. Атайым бер һүҙ ҙә өндәшмәне, эстән генә нимәлер мыңғыраны. Уның һүҙҙәре миңә лә, әсәйемә лә ишетелмәне. Әсәйем минең тамағымды туйҙырҙы ла, ғәҙәтенсә, сығып китте. (Ғималова М.Ғ., Рәхимова С.М. Изложениелар өсөн текстар йыйынтығы: V-IX класс уҡытыусылары өсөн ҡулланма, үҙгәртелгән 3–сө баҫмаһы.- Өфө: Китап, 2009, 186- сы б.)

**III сирек Михась ...**

Һуғыштың тәүге осоро. Мине, ауыр яраланған һалдатты, партизандар, дошман тылынан табып, үҙ лагерҙарына алып ҡайтты. Еүеш землянкала мине партизандар фельдшеры ҡарай. Ул дарыу менән дә, йылы һүҙҙәре, яҡты өмөттәре менән дә дауалай. Әгәр ҙә ун өс йәшлек партизан малай Михась булмаһа, моғайын, был землянкала бик оҙаҡ ятҡан булыр инем. Әлеге землянкаға мине килтергәндең икенсе

көнөндә әкрен генә, һаҡ ҡынаатлап керҙе лә ул минең эргәлә торған бүкәнгә ултырҙы. Малайҙың сәстәре етен кеүек аҡһыл, ә күҙҙәре етен сәскәһе төҫлө. Төймәләй генә танау осо өҫкә сөйөлгән, ҡалын ирендәре алһыуланып тора. Миңә ул ҡыҙыҡһынып та, ҡыҙғанып та ҡарай. - Мин скрипкала уйнай беләм, - тине ул ҡапыл балаларға хас бер ҡатлылыҡ менән. – Теләһәгеҙ, һеҙгә лә берәй көй уйнап күрһәтәм. Уйнайыммы? Ризалығымды белдереп, башымды һелктем. Михась Степан Разин тураһындағы көйҙө уйнай башланы. Йөрәктән сыҡҡан моң ағылды. Землянкаға бер партизан, уның артынан икенсеһе, өсөнсөһө, дүртенсеһе керҙе. Шым ғына керәләр ҙә ҡайҙа етте шунда урынлашалар. Бөтәһе лә Михастың уйнауын тыңлайҙар. Бер кәй икенсеһе менән алмашына торҙо. Михась йә оҙон, һағышлы көйҙәрҙе уйнай йә ҡыҫҡа, шаян көйҙәр менән тыңлаусыларҙың күңелдәрен дәртләндерә. Ул быларҙың бөтәһен дә ысын күңелдән башҡара. Эске яныу менән ысын таланты булған һәм музыкаға ысын- ысындан ғашиҡ кеше генә шулай уйнай ала. Михась, башын ҡыйшайтып, сикәһен скрипкаға терәй ҙә уйнауын ғына белә. Михастың йырҙары беҙҙең Тыуған илгә булған ҡайнар мөхәббәтәрҙе көсәйтә, дошманға булған нәфрәтебеҙҙе тағы ла арттыра. Нәҙек кенә кәүҙәле, мөләйем йөҙлө, иркә ҡарашлы был баланыңошондай аяуһыҙ һуғыш шарттарында ҙурҙар менән бергә көрәшеп йөрөүен күрер үҙе генә лә беҙҙең нәфрәтте унлата арттыра ине. (Ғималова М.Ғ., Рәхимова С.М. Изложениелар өсөн текстар йыйынтығы: V-IX класс уҡытыусылары өсөн ҡулланма, үҙгәртелгән 3–сө баҫмаһы.- Өфө: Китап, 2009, 200- сө б.)

IV сирек Тылдың ярҙамы

Бөйөк Ватан һуғышында хәрәкәт итеүсе армияларға тыл делегациялары әленән- әле килеп тора ине. Был матур йоланы тыуған Башҡортостаныбыҙ делегациялары ла айырыуса ихласлыҡ менән башҡарҙы. Өлкә партия ойошмаһының, республика хөкүмәтенең делегациялары Башҡорт атлы дивизияһында әллә нисә мәртәбә ҡунаҡҡа булдылар. Юлда барғанда, Калач станцияһына етәрәк, беҙ Башҡортостан вәкилдәренең килеүен ишеттек. Тыуған яҡтан килгән ҡунаҡтар, беҙҙе эҙләп, Трибунаға барған, ләкин тапмағандар икән. Әммә юғары хәрби штабтар ярҙамында беҙҙең эҙгә төшә алғандар һәм бына – Калачта осрашыу... Был осрашыу ифрат йылы булды. Ҡунаҡтар беҙгә вагон бүләк алып килгән, уларҙың һигеҙенә һоло тейәлгәйне. Аҙаҡтан һалдаттар, хатта аттар ҙа, тәм- томдо һиҙеп, Калачҡа йылғырыраҡюрттырҙылар, тип көлөштөләр. Республика хөкүмәте бик бай бүләктәр – йылы кейем, бирсәткә, аяҡ кейемдәре ебәргән. Меңәрләгән һуғышсыға шәхси бүләктәр ҙә бар ине, уларҙы Башҡортостан кешеләре үҙҙәренең уландарына, ирҙәренә, ҡустыларына һәм иптәштәренә ебәргән. Полк комиссары майор Әлибаев миңә хром итек бирҙе. Уның размеры тап минеке 44– се. Итек эсендә бәләкәс кенә хат киҫәге ята ине. Унда: “В этих сапогах ни шагу назад!” – тип яҙылғайны. Калач станцияһы ҙур хәрби объект ине. Дошман самолеттары уны теләһә ҡасан утҡа тотоуҙары мөмкин. Шуға ҡарамаҫтан, комдив полктарҙы станция тирәһендә туҡтатырға ҡарар итте, һәм беҙ ҡәҙерле ҡунаҡтар менән яҡындан күрешеү бәхетенә ирештек. Көн буйы улар частан йөрөнө, һуғышсылар менән осрашты, үҙҙәренең тылдағы героик хеҙмәттәре тураһында һөйләне, беҙҙең уңыштарға ҡыуанды. Дивизияның ритмлы тормошо туҡталманы, кискә тиклем вагондар бушатылды, ылауҙар тейәлде. (Ғималова М.Ғ., Рәхимова С.М. Изложениелар өсөн текстар йыйынтығы: V-IX класс уҡытыусылары өсөн ҡулланма, үҙгәртелгән 3–сө баҫмаһы.- Өфө: Китап, 2009, 209-

**Инша өсөн темалар:**

II сирек:Иң ҡәҙерле кешем.

III сирек: Яҙҙың бер көнө.

IV сирек: Еңеүҙе яҡынайттылар.

Әҙәбиәт:

1. М.Ғ Усманова, З.М Ғабитова.Сборник диктантов и изложений. өсөн 2009г 4. Толомбаев Х.А.,;Габитова З.М., Фатихова Ш.Х. Тесты по башкирскому языку и литературе 5-9 –класс )Уфа, 2008

2.Уҡытыу урыҫ телендә алып барылған дөйөм белеү ойошмаларының 5-11-се кластары өсөн «Туған (башҡорт) тел һәм әҙәбиәт » предметы буйынса белем биреү өлгө программалары /авт,-төҙ.; В.И. Хажин, Ә.Х. Вилданов,Ф.Ә. Аҡкужина /.- Өфө ; Китап,2017.-104бит.